Кәүсәриә Шафикова
Фәүзиә Юлдашбаева
Мөхәммәт Закиров
Дилә Булгакова
Альберт Ҡотоев

# САТҠЫЛАР





Кәүсәриә Шафиҡова

# БЫЛ ЙЫРЫМ ҺИНЕҢ ХАҠТА

Кәүсәриә
Шафиҡова

# БЫЛ ЙЫРЫМ ҺИНЕҢ ХАҠТА

Шиғырҙар

Башҡортостан китап нәшриәте
Өфө — 1985

84 Баш
Ш 26

**Шафиҡова Кәүсәриә**
Ш 26 Был йырым һинең хаҡта. Шиғырҙар.— Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1985.— 32 бит.

Йәш шағирә Кәүсәриә Шафиҡова шиғриәтенең төп геройы — бер ниндәй ауырлыҡ алдында ла юғалып ҡалмай, һығылып төшмәй торған көслө рухлы шәхес. Ул тормошто, кешеләрҙе, тыуған ерен һөйә, шуға уның поэтик һүҙе йөрәккә илһам бирә, көрәшкә һәм еңеүгә рухландыра.

Ш $\frac{4702110000-140}{М\ 121\ (03)-85}$ 118—85 84 Баш

© Башҡортостан китап нәшриәте, 1985 й.

## ТЫУҒАН ЯҠ

Ҡосағында күреп туймаҫ
Сәскәләр үҫә икән,
Йырың кеүек, елдәрең дә
Йыуатып иҫә икән,
Гүзәлдәрҙән, әй, гүзәл яҡ —
Тыуған яҡ.

Ҡояш нурын тулҡын итеп
Аҡ болот йөҙә икән,
Һинән алыҫ йәшәүҙәре
Үҙәкте өҙә икән,
Гүзәлдәрҙән, әй, гүзәл яҡ —
Тыуған яҡ.

Шишмәләрҙең ағышы ла,
Тәме лә бүтән икән.
Мәңге шиңмәҫ сәскә кеүек
Ғүмеркәй һиндә икән,
Гүзәлдәрҙән, әй, гүзәл яҡ —
Тыуған яҡ.

## ҺИНДӘ

Һыу һипмәгеҙ, берүк,
Үҙем керҙем утҡа.
Йәшәүем дә кәрәк,
Һөйөүем дә кәрәк,
Йырлауым да кәрәк,
Янаммы һуң юҡҡа?!
Йәнде, тәнде тоташ
Ялмап алды ялҡын.
Үҙем осөн генә
Түгел яныуҙарым,
Янам бер кемгә лә
Булмаһын тип һалҡын.
Йәшәүем дә һиндә,
Йырлауым да һиндә,
Һиндә, туған халҡым.

## ҺӘЙКӘЛ

Һәйкәл тора ауыл уртаһында,
Ҡойма менән урап алынған.
Ҡайтмай ҡалған ауылдаштарымдың
Исемдәре унда яҙылған.
Түтәл-түтәл гөлдәр тирә-яғы,
Йоҡлай унда беҙҙең туғандар.
Беҙ йәшәгән яҡты был көн осөн
Яу ҡырында ҡорбан булғандар.
«Беҙ ҡайтырбыҙ, һеҙ көтөгөҙ» ,— тигән
Һүҙҙәр күпме өмөт иткәндәр.
Ул дауыллы йылдар көткәндәргә
Ҡайғы-һағыш биреп үткәндәр.
«Батырҙарса һәләк булды» ,— тигән
Хәбәрҙәре килгән уларҙың.
Һәйкәл тора ауыл уртаһында —
Иҫтәлеге данлы йылдарҙың.

## ҒУМЕРЕН ЙЫР ИТҺЕН

Йыр булғас,
Уйлатһын,
Көлдөрһөн,
Уйнатһын,
Илатһын,
Йыуатһын.
Йыр икән,
Йыр булһын,
Тауҙарҙы
Тетрәтһен,
Таштарҙы
Иретһен.
Ә кеше үҙ ғүмерен
Ана шул
Тетрәтер, йыуатыр
Йыр итһен.

## ЗӘҢГӘР НУР

Зәңгәр күктә зәңгәр болот
Зәңгәр күлдә үҙен күргән.
Күҙҙәренән йәш килгәнсе
Рәхәтләнеп ул әй көлгән.
Нәҡ шул ваҡыт ҡырҙа үҫкән
Гөл-сәскәләр ямғыр көткән.
Әллә шуны белеп инде,
Зәңгәр ямғыр яуып үткән.
Зәңгәр болот тамсылары
Зәңгәр сәскә булып үҫкән.
Кескәй ҡыҙыҡ рәсеменә
Ер ҙә, күк тә ана шундай
Бер зәңгәр нур булып күскән.

## КАМА БУЙЫНДА

Кама буйында мин паром көтәм,
Тыныс ҡына аға кеүек Кама.
Юҡ, ул тыныс түгел, шаулап килеп
Ярһыу тулҡындары ярға ҡаға.
Аҡсарлаҡтар оса, улар өсөн
Тулҡын шауы бер ни түгел икән.
Тәү күреүем, Кама бөтөнләй ҙә
Тынныслығын юйған күңел икән.
Киңлеге лә, гүзәллеге лә бар,
Бар микән һуң тыныс аҡҡан сағы?
Ә бармы һуң, бармы, эҙләп,
эҙләп
Күңелемдең тынғы тапҡан
сағы?!.

## ДУҪТАРЫМ КҮП

Эй күңелле йәшәү дуҫтар менән,
Күкрәк киреп һулауы ла еңел,
Дуҫтарым күп, һәр саҡ янымдалар,
Бойоғорға ваҡыт тапмай күңел.
Дуҫтарым күп, алып килә улар
Бүләктәрҙең иң-иң аҫылдарын.
Ҡайһылары йырлай, бейеп ала,
Яңы шиғыр һөйләй ҡайһылары.
Йылмайыуын бүләк итә күптәр,
Ауыр яҙмыш ҡала онотолоп.
Шат ауаздар менән донъя тула,
Йөрәк әрнеүҙәре ҡала тынып.
Коляскамда түгел, әйтерһең дә,
Атлап барам баҫыу юлдарынан.
Күктә ҡояш, ерҙә — ул мин көләм,
Ҡыҫып тотҡан дуҫтар ҡулдарымдан.

Шау сәскәле болон, иҫкән елдәр,
Һәм йырҙары урман ҡоштарының,
Ана шулар инде миңә булған
Аҫыл бүләктәре дуҫтарымдың.

## ҠАЙТЫП КИЛӘМ

Ҡунағы итте урман,
Түренән урын биреп.
Таҡыя бүләк итте,
Гөлләмәләрҙән үреп.
Балы бар иренемдә
Нисә төр еләгенең,
Һәм наҙлап сәстәремдән
Иҫеүе елдәренең.
Ҡулға-ҡул тотоношоп,
Рәхәтлек-шатлыҡ менән,
Аҡ сәскәләр иленән
Йыр алып ҡайтып киләм.
Моңдарын һис ҡыҙғанмай
Күңелгә һалды ҡоштар.
Шуларҙы йыр итәм дә
Өләшәм һеҙгә, дуҫтар.

## МӘҢГЕ ЯНАҺЫ КИЛӘ

Мәңгелеккә тыумаһаҡ та,
Мәңге янаһы килә.
Шулай булғас, мәңге йәшәү
Бар ул, тиәһе килә.
Мин ышанам, тән һыуынғас,
Минең ғәзиз йәнемде
Ҡояш үҙенә алыр, тип,
Йәшәүҙән һуң да дауамым
Бер нур булып ҡалыр, тип...

## БӨГӨН ГЕНӘ

Мин — кисәгә үткәндәрем түгел,
Мин — өр-яңы бөгөн, өр-яңы.
Әйтерһең дә, тәүге тапҡыр
ғына
Күрҙем бөгөн яҡты донъяны.
Сабый бала кеүек, үҙе тормош
Йылмая ла белә, күрәһең.
Матурлығын ниһә тәү күреүем,
Күҙем генә тейә күрмәһен.
Ҡоштар йырын, шишмә сылтырауын,
Асылғанын шартлап бөрөнөң
Тәүге тапҡыр, әле бөгөн генә,
Рәхәтләнеп тыңлап
йөрөнөм.
Төштә түгел, мин өнөмдә
күрҙем
Бәхет таңдарымдың атҡанын.
Эйе, бөгөн барыр ҙур юлыма
Тәүге аҙымымды атланым.
Юлға сыҡтым, ҡағыҙ, ҡәләм
тотоп
(Мин әлегә кескәй ҡош ҡына),
Нindәй гүзәл, ниндәй киң был
донъя,
Ҡанаттарың елпеп
ос ҡына.

## ҠЫШҠЫ УРМАН

Уҫаллаша барып, иҫте елдәр,
Һулып ҡалып, гөлдәр баш эйҙе.
Күңелемә рәхәт бирә торған
Аҡ ҡарҙары менән ҡыш килде.

Тәҙрәләр инде асылмайҙар:
Тышта һыуыҡ, тышта бурандар.
Тик шулай ҙа ҡыштың үҙ йәме бар:
Ниндәй матур ҡышҡы урмандар!
Ҡышҡы урман! Аҡ ҡар шәлен урап,
Ҡайын тора имән янында.
Һойләшәләр кеүек ишеттермәй,
Бер сихри моң ғына бар бында.
Урман тып-тын. Ап-аҡ тирә-яғым,
Ап-аҡ ҡына кеүек барыһы.
Юҡ шикелле был саҡ бер кемдең дә
Ғазаптары, һағыш, ҡайғыһы.
Ап-аҡ ҡына... Яратам мин ҡышты
Ана шундай ап-аҡ булғанға.
Аҡлыҡ, паклыҡ эҙләп күңелемә,
Килдем тағы ҡышҡы урманға.

## ҠОЯШ ҠОТЛАЙ

Байрам бөгөн, байрам бөгөн,
Шатлыҡ бизәй күңел түрен.
Өләсәй һәм әсәйҙәрҙе,
Апай һәм һеңлеләрҙе лә
Ҡояш күктән нурын һибеп
Ҡотлай бөгөн, ҡайнар үбеп.
Әйтә ҡояш:
«Байрам менән!
Шат булығыҙ шулай гел ән.
Һеҙ бит тормош гүзәлдәре,
Һеҙҙең менән йәшәү йәмле.
Яҡты булһын осөн көндәр,
Үрелеп үҫһен өсөн гөлдәр,
Ергә һибеп нурҙарымды,
Наҙлайым һеҙ матурҙарҙы,
Байрамығыҙ ҡотло булһын,
Тормошоғоҙ балҡып торһон!»

## ҺӘР ТАРАФТА — ЯҘҒЫ АУАЗ

Үҙе менән яҙ шатлығы
Алып килде ҡара ҡарға.
Наҙ өләшеп елберләй ел,
Тамсы тама һуңғы ҡарға.
Яҙғы ялҡын ҡаты ергә,
Ҡары ирер, боҙо ирер.
Бағам ҡара офоҡтарға.
Тиҙҙән былбыл сәләм бирер.
Инде ҡырҙар уяу ята,
Һәр тарафта — яҙғы ауаз.
Ҡоштар менән генә түгел,
Хеҙмәт менән башлана яҙ.
Хеҙмәт менән башланғанға
Көнө сыуаҡ, күге аяҙ.

## ҠЫҘҘАР ЙЫРЫ

Сылтыр-сылтыр шишмәләрҙең
Сафлығы бар.
Күктә йөҙгән болоттарҙың
Аҡлығы бар.
Күскән унда сәскәләрҙең
Матурлығы.
Тулған унда ай, ҡояштың
Яҡты нуры.
Бар үҙ моңо, бар һағышы,
Бар шатлығы.
Иртәләрен иҫкән елдең
Йомшаҡлығы.
Тулҡындары килеп ҡаҡһа,
Йәнгә йылы.
Эй һин, гүзәл, мәңге тынмаҫ
Ҡыҙҙар йыры!

## МӨМКИН ТҮГЕЛ

Күңелдәргә тулып ярһый
Яҙғы ташҡын.
Күңелкәйем, тынып торма,
Әйҙә, ашҡын.
Мәңге шулай шаулы бул һин
Яҙҙар кеүек.
Аяҙ булһын күгең, торһон
Ҡояш көлөп.
Яҙын килгән ҡоштар һиңә
Ҡанат ҡуйһын.
Ҡанат остарына шатлыҡ
Нуры ҡунһын.
Баҫалмаһын ҡар һыуҙары
Һалҡыны ла.
Ҡайнарлан һин саф хистәрең
Ялҡынында.
Йырла, күңел, һандуғасҡа
Ҡушыл да һин,
Яҙ гөлөнә һөйөүеңде
Бышылда һин.
Моң менән тул, ғазаплан һин,
Ярһы, күңел,
Тыныс күңел менән йәшәү
Мөмкин түгел.

## ҠОЯШЫМ

Һулып барған сәскә: «Хуш, донъя...» — тип
Әйткән ине, өмөт өҙөлгәс.
Йәнә килде йәшәү был сәскәгә,
Хәлһеҙләнеп ергә бөгөлгәс.
Болот булып килде йылы ямғыр,
Шифа булып тамды ул уға.

Керпектәрен асты ул яҡынан,
Күлә-күлә баҡты донъяға.
Күк йөҙөнән болот таралыуға,
Көләс ҡояш һипте нурҙарын,
Ул, сәскәне ҡосоп үбә-үбә,
Алтын нурҙарына уралды.
Талғын ғына иҫте елдәре лә,
Наҙлай-наҙлай уны иркәләп.
Ем-ем иткән ысыҡ
бөрсөктәрен
Бүләк итте уға иртәләр.
Донъялағы барлыҡ шифаларҙан
Көслө, әсәй, наҙың, ҡарашың.
Һин булғанда янда, мин һулымам,
Һин ямғырым минең, ҡояшым.

***

Һыуҙарға һалдым һине,
Йөҙҙөң дә сыҡтың унан.
Хистәрем булып таштың
Күңелем ярҙарынан.
Мин һине утҡа яҡтым,
Янһын да бөтһөн тиеп.
Йөрәкте ялҡын алды,
Йәшәнем янып-көйөп.
Уйлағас бер саҡ инде,
Ҡалдың, тип, онотолоп,
Һин зәңгәр күстәремдә
Ҡабындың йондоҙ булып.
Ҡалдырыр өсөн һине
Мәңгегә аҙаштырып,
Йылдарҙың үткәненә
Илттем юл яңлыштырып.
Томанлы йылдар аша

Һин мине эҙләп таптың, —
Һағышым, моңом булып
Йырыма кире ҡайттың.

## МЕҢ РӘХМӘТ

Иң йомшаҡ ҡулдар,
Иң көслө иңдәр —
Тик әсәләрҙә,
Юҡ уға тиңдәр.
Әсәләр күҙе —
Иң матур күҙҙәр.
Әсәләр һүҙе —
Иң наҙлы һүҙҙәр.
Улар бирәләр
Иң дөрөҫ кәңәш,
Улар булалар
Иң яҡшы серҙәш.
Иң нескә күңел,
Иң саф, ҙур йөрәк,
Иң ҡайнар һөйөү,
Иң изге теләк,
Иң йылы ҡуйын —
Тик әсәләрҙә.
Бәхет бар улар
Булған өйҙәрҙә.
Йәшәү йәмен һеҙ
Биргән бит беҙгә.
Әсәләр, рәхмәт,
Мең рәхмәт һеҙгә!

## ҠЫҘ КИТӘ

Ауылда — туй. Мәжлес түрләп тора,
Туй йортонда кисә бөгөн дә.
Күңелле лә бында, шул уҡ ваҡыт
Моңһоулыҡ та бер аҙ — күңелдә.
Күҙ, шулай ҙа коно ниндәй йәмле,
Хәтерләтә матур яҙ айын.
Ҡояш апа көлтә нурҙар һибә,
Туйҙы ҡотлауылыр, моғайын.
Гармун тауышы, йыр, күңелле шау-шыу,
Йәше, ҡарты, бала-сағаһы —
Бер кем дә юҡ бында килмәй ҡалған,
Оҙатырға килгән барсаһы.
Туй китә бит бөгөн, ҡыҙ китә бит,
Килен булып күрше ауылға.
Пар аттары кейәү егетенең
Ярһып сығасаҡтар ҙур юлға.
Ҡыңғырауҙар сыңы күңелемдең
Ҡылдарына ҡағылып моң сиртә.
Бәхет теләп, яҡты тормош теләп
Оҙатабыҙ — бөгөн ҡыҙ китә!

## ЕЛДӘРГӘ ҠАРШЫ

*В. Титовтың «Үлемгә үс итеп»*
*тигән китабын уҡығас*

Аяҡһыҙға ауыр саҡта,
Ҡулһыҙға әллә еңел?!
Ғазаптарҙан, әйҙә, йөрәк
Телгеләнһен, тик һин генә
Бойоға күрмә, күңел.
Тормош елдәренә ҡаршы
Асылғандар тәҙрәләр.

Ошо асыҡ тәҙрәләрҙән
Ҡот осҡос булып дауыллы
Ел бәреп керһә әгәр.
Яҙмышың ҡаршыһында, тим,
Һин ҡурҡып ҡалырһыңмы?
Ул саҡта, мин йәшәймен, тип,
Күкрәгеңә һуға-һуға,
Һин әйтә алырһыңмы?
Юҡ!

## КӨТКӘН КЕШЕҢ БУЛҺА...

*Һеңлемә*

Әллә һуң һин ҡоштар затынанмы?
Ҡайтаһың да тағы китәһең.
Китәһең дә мине генә түгел,
Тыуған йортто моңһоу итәһең.
Һин ҡайттыңмы, көндәр көлөп тора,
Сәскә ата гөлдәр ҡышын да.
Китмәй генә ҡалып булмаймы һуң
Мәңгелек яҙ булып ошонда?..
Иңдәреңдә ҡоштар ҡанатылыр,
Бөгөн бына тағы китәһең.
Һорамайым, ниңә китәһең, тип,
Белеп торам нимә әйтәһең:
— Көткән кешең барҙа,
ҡайтыу рәхәт,
Һин бит мине һағынып
көтәһең!

## ИГЕНСЕ ЙЫРЫ

Мин ҡырҙарҙа иген үҫтерәм,
Байлыҡ бирәм тыуған илемә.

Тамған тирем, тырыш
хеҙмәтем —
Ҡайнар һөйөү тыуған еремә.
Мин ҡырҙарҙа иген үҫтерәм,
Бәхет бирәм ғәзиз халҡыма.
Уңыштарым артһа йыл һайын,
Осар ҡоштар булып
талпынам.
Мин ҡырҙарҙа иген үҫтерәм,
Именлеген теләп донъяның.
Һуғыш түгел, иген ҡырҙары
Иңләй алһын
бөтә ер шарын.

## БЫЛ ЙЫРЫМ ҺИНЕҢ ХАҠТА

«Шишмәнең сылтыр-сылтыр
Ағышын тыңла», — тинең.
Оторға ҡоштар моңон,
Урманға алып килдең.
Саҡырҙың болондарға,
«Күр, — тинең, — ана нисек
Гөлдәрҙе, сәскәләрҙе
Иркәләй елдәр иҫеп».
«Игендәр шаулап торған
Ҡырҙарға кил һин, — тинең, —
Ошонан бит башлана
Ырыҫы тыуған илдең».
«Ҡолаҡ һал әле, — тинең, —
Шауына тирәгеңдең».
Әйттең һин:
«Инде тыңла
Тибешен йөрәгеңдең».
Ишетәм: йөрәгемдең
Был йыры һинең хаҡта.

Әй тормош, гүзәллегең
Йырҙарҙа йырларлыҡ та.
Бар булған йәмдәреңде
Йыр итеп йырлар өсөн,
Көс бирҙең күкрәгемә,
Уяттың йөрәк хисен,
Өйрәттең мине, тормош,
Дауылға бирешмәҫкә.
«Һин йырлап йәшә!» — тинең,
Хаҡым юҡ килешмәҫкә.

***

Шиғыр яратмаған кеше,
Донъяла һин ниңә бар?
Нисек шулай гүзәллеккә
Күңелеңдә урын тар?
Күҙҙәреңә нурҙар һибеп,
Яҙҙар килмәйҙер һиңә.
Инештәр йыр йырламайҙыр,
Гөлдәр көлмәйҙер һиңә.
Бер нәмәң юҡ, был тормошта
Һин нисек йәм табаһың?
Асыуланмай, әллә нишлә,
Күңелемдә бер ҡыҙғаныс
Фәкир булып ҡалаһың.

## ЛӘЙСӘН

Ысыҡ кипмәгән ине әле
Япраҡтарҙа, үләндә,
Тәүге ауазыңды һалып,
Донъяға һин килгәндә.
Таң менән бергә тыуҙың һин,
Балҡытып бар донъяны.

Һин тәү таҡтыр күҙ асҡанда
Ҡырҙа гөлдәр уянды.
Әйтерһең дә, иң-иң матур
Сәскәһе һин был майҙың.
Һине наҙлап, һине йырлап
Туймаҫ күңел турғайым.
Ә исемең матурлығы!
Нисек кенә бит әле:
Ләйсән!
Мәңге көләс ямғыр,
Тәбиғәттең бер йәме.

## ҺАҒЫНЫП ҠАЙТАМ

Һағынып ҡайтам, һағынып
Ауылым иртәләрен;
Күрәһем килеп саф нурҙар
Гөлдәрҙе иркәләүен.
Һағынып ҡайтам ауылдың
Хәтфәле туғайҙарын;
Тыңларға зәңгәр киңлектә
Һайрауын турғайҙарҙың.
Ҡайтыу менән килеп етәм
Ҡамышлы күл буйына;
Томбойоҡтар өҙәм, керең
Тулҡындар ҡуйынына.
Һағынып ҡайтам, һағынып
Диңгеҙҙәй баҫыуҙарҙы;
Шул баҫыуҙарҙы бар иткән
Алтын ҡуллы дуҫтарҙы.

## ЙЫРЫМ

Күңелгә тынғы бирмәгәс
Тыуасаҡ яңы йырым,

Бер йороп ҡайтайым әле, тип
Һайланым иген ҡырын.
Төн ҡараһын йыртып, таңдың
Нурҙары һибелеүгә
Шатлыҡлы хистәр, тойғолар
Өҫтәлде күңелемә.
Эй йәмле. Ҡоштар һайраша,
Ҡаршылап хеҙмәт таңын,
Туҡ башаҡтарҙы тирбәткән
Елдәре ниндәй талғын.
Был икһеҙ-сикһеҙ диңгеҙҙәй
Тулҡынлы ҡырҙар буйлап
Йөронөм, өр-яңы булған
Ошо йырымды йырлап:
Арышмы ул, бойҙаймы ул,—
Бәхеткә һәр бөртөгө.
Ауылдаштарымдың бында
Түгелгән хәләл тире.
Игенсе, һоҡланам һинең
Был гүзәл хеҙмәтеңә.
Йырымда — хөрмәт тә һиңә,
Йырымда — рәхмәтем дә!

## ҺИН БӘХЕТЛЕ

Донъяға ир бала тыуһа,
Күктә бер йондоҙ арта.
Ҡыҙ тыуһа, яҙҙы ла көтмәй,
Ерҙә гөл сәскә ата.
Тормоштоң бер гүзәле һин,
Һин, әсәй, ҡот — донъяға.
Ерҙә гөлдәрең йылмая,
Күктә йондоҙоң яна.

## АҒИҘЕЛ ЯРЫНДА

Был яҡ миңә ят та, яҡын да бик,
Юҡ ине шул бында булғаным.
Аҡ пароход үтте ялҡын ярып,
Бейек ярҙан яулыҡ болғаным.
Ана исек, йәйеп ҡанаттарын,
Аҡсарлаҡтар ҡоса Иҙелде.
Сырҡылдашып, улар үҙҙәренсә
Өндәшәләр:
«Һин дә килдеңме?»
Килдем әле. Оҙатырға тиеп,
Ҡаршыларға тиеп килмәнем.
Килдем әле күреп йөрөргә тип,
Ағиҙелкәй буйы йәмдәрен.
Гөл-сәскәләр һибелгәнме тиһәм,
Ағиҙелкәй, тирә-яғыңа,
Өфөм икән, шулай матур булып
Баҫып тора һинең ярыңда.
Саҡ-саҡ ҡына тыйып тора һымаҡ
Ярһыу атын ана Салауат.
Бына-бына Ағиҙеле буйлап
Сабып китер кеүек ул ҡабат.
Аҡҡоштармы бында ҡағынғандар,
Аҡ ҡауырыйҙар ҡалған ҡойолоп...
Бындай хозурлыҡты
йырламайса
Тормаҡ кәрәк исек тыйылып.

***

Мин ҡысҡырам, яратам, тип,
Ҡысҡырам мин бар тауышҡа.
Барынан да көслө минең
Мөхәббәтем был тормошҡа.

— Яратам, тип ҡысҡырмайҙар,
— Өйрәтмәгеҙ, үҙем беләм,
Ҡысҡырам мин, ишетһен тип
Һәр бер япраҡ, һәр бер үлән.
Яратам мин иҫкән елде,
Яҡты айҙы, ҙур ҡояшты;
Ярға ҡаҡҡан тулҡындарҙы,
Һауаларҙа осҡан ҡошто.
Кешеләрҙең илар саҡта
Көлгәндәрен яныш һөйәм.
Яныш һөйәм, шул һөйөүем
Ялҡынында үҙем көйәм.
Мин яратам, мин яратам,
Был тормошто йөҙ, мең ҡабат.
Ҡабатланһын минең ауаз:
«Мин яратам, мин яратам!..»

## ҠЫР ҠАҘҘАРЫ

Ҡыр ҡаҙҙары осоп үтте,
Парһыҙ улар, һананым.
«Ҡайҙа булды берегеҙ!» — тип
Үҙҙәренән һораным.
Бер ҡаҙ моңһоу тауыш бирҙе:
«Киткән инек алты пар,
Беребеҙҙе, минең дуҫты,
Кисә атып алдылар».
Нимә булды был донъяға?
Күҙҙәр күрмәҫ булдымы,
Яҙ киттеме ер йөҙөнән,
Матурлыҡ һулынымы?
Ҡыр ҡаҙҙары осоп үтте,
Ун бер бортоҡ барыһы.
Инде бына йөрәгемдә
Шул ҡаҙҙарҙың ҡайғыһы.

## ЭЙ ГҮЗӘЛ ҠЫҘ БАЛА

Ҡысҡырып-ҡысҡырып
Көлә бер ҡыҙ бала.
Был көлөү күңелемә
Шатлыҡлы хис һала.
Ҡыҙ көлә, эй рәхәт
Ҡыҙ бала көлгәндә;
Һөйөнөп тирбәлә
Шикелле гөлдәр ҙә.
Серле ул ҡыҙ бала,
Бер уйсан, бер көлә.
Көлөүе донъяға
Нур булып бөркөлә.
Гел көлөп йәшә һин,
Эй гүзәл ҡыҙ бала.
Ана һин сәскәне
Иркәләп һөйөргә
Наҙлы ел ҡуҙғала.

***

Сәскәләр ҙә көлөп тормай,
Һайрап тормай ҡоштар ҙа.
Ҡояшты ла болот ҡаплай,
Янымда юҡ дуҫтар ҙа.
Ләкин синһеҙ матурлығы
Йөрәгемдә был көндөң.
Әсәм йәшәү биргән көн был,
Йәшәү — бәхет, унан түйған
Сағы булмаҫ күңелдең.

## ДАНЛЫ ИҪӘНБАЙ БИТ УЛ

Аҡҡоштар килеп төшөрлөк
Юҡ уның киң күлдәре.
Ләкин ауылдаштарымдың
Сикһеҙ киң күңелдәре.
Яҙҙар килһә, болондары
Гөл-сәскәгә бай була.
Минең тыуып үҫкән ауылым
Йәмле Иҫәнбай була.
Күк тулып ҡабына кисен
Ем-ем иткән йондоҙҙар.
Эштән ҡайта арыу белмәҫ
Беҙҙең егеттәр, ҡыҙҙар.
Таңдары һайрар ҡоштарҙың
Йырҙарына бай була.
Минең тыуып үҫкән ауылым
Күркәм Иҫәнбай була.
Игендәр тирбәлгән ҡырҙар
Күңелде тартып тора.
Көн һайын беҙҙең тормошта
Матурлыҡ артып тора.
Хеҙмәт һөйөүселәргә бай,
Уңғандарға бай бит ул.
Минең тыуып үҫкән ауылым
Данлы Иҫәнбай бит ул.

***

Хыялһыҙ кеше, һин бармы,
Йәшәйһеңме донъяла?
Кәрәкмәйҙер һиңә ай ҙа,
Ҡояш та, йондоҙҙар ҙа.
Кәрәкмәйҙер сәскәләр ҙә,
Ҡош, елдәр, ямғырҙар ҙа.

Юҡтыр тошкәнең һыуҙарға,
Янғаның ялҡындарҙа.
Белмәйҙер йәнең койорғә,
Йөрәгең яратырға.
Бик мошкол икән хәлдәрең,
Һүҙем юҡ йыуатырға.
Үткәнең дә юҡтыр һинең,
Юҡтыр киләсәгең дә.
Йәш түккәнең булмағандыр,
Юҡтыр көләсәгең дә.
Ҡайҙан булһын һөйләр һүҙең,
Юҡтыр йырлар йырың да,
Шулай өндәшәмен һиңә:
«Йә, хуш, бул үҙ юлыңда».

***

Әлли-бәлли, әлли-бәлли,
Ҡыҙ йоҡлата ҡурсағын.
Үҙемдең дә бар ине бит
Ҡурсаҡ уйнаған сағым.
Зәңгәр күҙен йомдо ҡурсаҡ,
Тиҙҙән йоҡлап китәсәк.
Ҡурсаҡ йоҡлатҡан арала,
Алтын йылдар булып ҡыҙҙың
Бала сағы үтәсәк.
Әлли-бәлли, әлли-бәлли...

***

Коҙ килде лә күккә селтәр —
Пәрҙә элде.
Көн үҙгәрҙе: берсә илап,
Берсә көлдө.

Һарғайҙы ла китте йөҙө
Ҡайындарҙың.
Тик әҫәре лә юҡ унда
Ҡайғыларҙың...
Көҙ — көҙ инде, ҡоштар ҡайтмай
Бөгөн — китә.
Ә ғүмеркәй үтә, яҙҙар
Көтә-көтә.

## АПРЕЛЬ КИЛДЕ

Тәҙрәмде астым, апрель керҙе,
Апрель керҙе наҙлы ел булып.
Күңелемдә апрель бөрөләнә,
Бөрөләнә яҙғы гөл булып.
Умырзая булып көлә апрель,
Ҡар һыуҙары булып ағыла.
Ул ярҙарҙан таша көслө ярһып,
Ҡоштар булып ҡанат ҡағына.
Апрель килде яңы йыр-моң булып
Тартылырға торған ҡылдарға.
Апрель килде, шаулап, гөрләп, апрель,
Хеҙмәт булып килде ҡырҙарға.

## АТЫЛМАЙ ТОРОҒОҘ, ЙОНДОҘҘАР

Бар күктә бер йондоҙ, шул йондоҙ
Зәп-зәңгәр нур һибә төнөмә.
Таңда ла һүнмәй ул, йылмайып,
Аҡ нурҙар яуҙыра күңелемә.
Күңелемде йыуатып балҡыған
Хыялым шул минең, өмөтөм.
Күгемдә йондоҙом янғанда,
Әле мин түңәрәк, бер бөтөн.

Йондоҙҙар атыла, меңдәрҙең
Йондоҙо һүнәлер бер төндә.
Атылмай торогоҙ, йондоҙҙар,
Бер генә, бер төнгә, бөгөнгә.
Күңелде китмәгеҙ, әй, тондәр,
Йондоҙһоҙ ҡалмаһын бер кем дә.

## ИКӘҮ

Танты ла аҡҡош аҡҡошон,
Бышылдап әйтте шул саҡ:
Бәхетле булыр инек беҙ,
Ғүмергә бергә булһаҡ.
Булырбыҙ, тигән яуаптан,
Шат тулҡындар бейеште.
Күҙҙәрен асты томбойоҡ,
Ҡамыштар тирбәлеште.
«Ғүмергә бергә булырбыҙ!» —
Был ауаз ҡабатланды.
Был мәлдә саф мөхәббәттең
Хистәре ҡанатланды.
Аҡҡоштар һыуҙа уйнағас,
Остолар йыраҡ, йыраҡ.
Яр буйында икәү ҡалды,
Бәхетле тормош юрап.

***

Ай түңәрәк икән,
Зәңгәр икән йондоҙ.
Әллә нишләп шуны,
Яңы белде бер ҡыҙ.
Был таңдарҙың тоҫо,
Ысын алһыу икән.

Ҡар һыуҙары кеүек,
Хистәр ярһыу икән.
Ҡыҙҙың керпектәре
Ысыҡлы үләнме ни,
Ләкин һағышты ул
Белмәй әле, белмәй.
Йөрәк яна, кем һуң
Һалған уны ҡуҙға?
Тәүге мөхәббәте
Килгән икән ҡыҙға.

## КИТКӘНДӘ

Ботөнләйгә айырылып
Нисек китәләр икән?
Мин дә богон ауылым менән
Хушлашам — мин дә китәм.
Китәм, ботөнләйгә түгел,
Шулай ҙа еңел түгел,
Оҙатып ҡала ауылым,
Моң-һағыш тулы күңел.
Урам яғы тәҙрәләрҙән
Ҡарап мин китер яҡҡа,
Голдәрем дә бойоҡҡандар,
Китә, тиеп, йыраҡҡа.
Һағышлана күл ҡамышы,
Бөгөлгән талдарым да;
Мин киткәнгәлер, бик моңһоу
Һандуғас һайрауы ла.
Ҡайындарым, аҡ юл теләп,
Йә, оҙатығыҙ мине.
Күҙ нурҙарым, һеҙҙе өҙөлөп
Һағындым да шул инде.

## НИҢӘ ИКӘН

Тәҙрәмде астым, кер, яҙғы ел,
Күңелкәйем һине һағынды.
Иҫ әле, иҫ, китһен еләҫ булып,
Хистәремә ялҡын ҡабынды.
Елдәр саҡырып тәҙрә асмай инем,
Уң һигеҙҙә сакта түҙгәнмен.
Ялҡынланып йондоҙ күҙләгәнмен,
Болондарҙа сәскә өҙгәнмен.
Ниңә икән бөгөн түҙеп булмай?
Күкрәгемдә ҡуйҙым елдәргә.
Йөрәгемдә өткән яҙғы ялҡын,
Инде хәҙер момкин, ахры, һине
Һағыштарға ғына тыңләргә.
Ебәк шәлемме ни, йомшаҡ елкәй
Йыуатмаҡсы һарылып иңдәргә.

## БӨГӨН ЕЛДӘР ТАЛҒЫН ИҪТЕ

Аҡ болотто мендәр итеп,
Ел йоҡлай тоштәр күреп.
Төшөндә лә йөрөйҙөр ул,
Ҡайын суҡтарын үреп.

Үтәләр ул элгән керҙе
Елберләтеп саҡ ҡына.
Тирбәтәләр япраҡтарҙы,
Ҡосоп алып һаҡ ҡына.

Һыу буйына йүгереп төшөп,
Тулҡындарҙы ҡыуалыр,
Бөгөлгән тал бөҙрәләрен
Ағым һыуҙа йыуалыр.

Ҡояш батты, ай ҙа ҡалҡты,
Таң менән ел уяныр.
Бөгөн шиндәй ел иҫер, тип,
Донъя күргән уйланыр.

## ЙЫР ЭҘЛӘЙЕМ

Үрмәле гөл булмаһам да,
Үреләм мин гел күккә.
Сәйерҙер ҙә үрелеүем
Буй етмәҫ бейеклеккә.
Ай, ҡояшҡа, үрелмәйем,
Нәфсем бик ҙурҙан түгел.
Ҡош булып күктәргә ашып,
Йыр эҙләй минең күңел.
Йәм оҫтәп дәртле йәшлеккә,
Ҡабынһын йондоҙҙары,
Мин бит серле киңлектәрҙән
Илһам эҙләйем бары.
Шулай күктән эҙләйем дә
Йырҙарҙы ерҙән табам.
Һәм йәнә мин гөлдәр үҫкән
Ер ҡыҙы булып ҡалам.

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Ғыуған яҡ . . . . . . . . . . . . . . 3
Һиңә . . . . . . . . . . . . . . 4
Һәйкәл . . . . . . . . . . . . . . 4
Ғүмерен йыр итһен . . . . . . . . . . . . 5
Зәңгәр нур . . . . . . . . . . . . . . 5
Кама буйында . . . . . . . . . . . . . 6
Дуҫтарым күп . . . . . . . . . . . . . 6
Ҡайтып киләм . . . . . . . . . . . . . 7
Мәңге янаһы килә . . . . . . . . . . . . 7
Бөгөн генә . . . . . . . . . . . . . . 8
Ҡышҡы урман . . . . . . . . . . . . . 8
Ҡояш ҡотлай . . . . . . . . . . . . . 9
Һәр тарафта — яҙғы ауаз . . . . . . . . . . 10
Ҡыҙҙар йыры . . . . . . . . . . . . . 10
Мөмкин түгел . . . . . . . . . . . . . 11
Ҡояшым . . . . . . . . . . . . . . 11
«Һыуҙарға һалдым һине...» . . . . . . . . . . 12
Мең рәхмәт . . . . . . . . . . . . . 13
Ҡыҙ китә . . . . . . . . . . . . . . 14
Елдәргә ҡаршы . . . . . . . . . . . . . 14
Көткән кешең булһа... . . . . . . . . . . 15
Игенсе йыры . . . . . . . . . . . . . 15
Был йырым һинең хаҡта . . . . . . . . . . 16
«Шиғыр яратмаған кеше...» . . . . . . . . . . 17
Ләйсән . . . . . . . . . . . . . . 17
Һағынып ҡайтам . . . . . . . . . . . . 18
Йырым . . . . . . . . . . . . . . 18
Һин бәхетле . . . . . . . . . . . . . 19
Ағиҙел ярында . . . . . . . . . . . . . 20
«Мин ҡысҡырам, яратам, тип...» . . . . . . . . . 20

Ҡыр ҡаҙҙары . . . . . . . . . . . . . . 21
«Сәскәләр ҙә көлеп тормай...» . . . . . . . . 22
Эй гүзәл ҡыҙ бала . . . . . . . . . . . 22
Данлы Иҫәнбай бит ул . . . . . . . . . . 23
«Хыялһыҙ кеше, һин бармы...» . . . . . . . . 23
«Әлли-бәлли, әлли-бәлли...» . . . . . . . . . 24
«Күҙ килде лә...» . . . . . . . . . . . . 24
Апрель килде . . . . . . . . . . . . . 25
Атылмай тороғоҙ, йондоҙҙар . . . . . . . . . 25
Икәү . . . . . . . . . . . . . . . . 26
«Ай түңәрәк икән...» . . . . . . . . . . . 26
Киткәндә . . . . . . . . . . . . . . . 27
Ниңә икән . . . . . . . . . . . . . . 28
Бөгөн елдәр талғын иҫте . . . . . . . . . . 28
Йыр эҙләйем . . . . . . . . . . . . . . 29

Кавсария Фидановна Шафикова

ЭТА ПЕСНЯ ПРО ТЕБЯ

Стихи

*(на башкирском языке)*

Редакторы
И. Н. Әхтәмйәнов

Рәссамы
А. А. Астраханцев

Художество редакторы
И. С. Файрушин

Техник редакторы
З. Ғ. Чингизова

Корректоры
Ф. Х. Ихсанова

ИБ № 3225

Наборға бирелде 22.05.85. Баҫырға ҡул ҡуйылды 02.08.85. П11301. Ҡағыҙ форматы $70\times90^1/_{32}$. Тип ҡағыҙы. № 1. Яңы ябай гарнитура. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 1,17. Шартлы буяу отт. 1,32. Учет.-изд. таб. 1,18. Тиражы 4000 экз. Заказ № 371. Хаҡы 12 тин. Башҡортостан китап нәшриәте. Өфө-25, Совет урамы,18. Башкирское книжное издательство. Уфа-25, ул. Советская, 18. Башҡорт АССР-ы Нәшриәттәр, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Өфө полиграфия комбинаты. Өфө-1. Октябрь проспекты, 2.

12 тин.

Кәүсәриә Шафиҡовага яҙмыш бәләкәйҙән үк ҡаты рәхимһеҙлеген күрһәтте, ул хатта мәктәп ишеген асыу мөмкинлегенән дә мәхрүм ҡалды. Ләкин барыбер ҡулына әлифба алды, уҡырга, яҙырга өйрәнде. Йәшәү өмөтөнән, тормош матурлыгынан, ҡояш яҡтыһынан бер минутҡа ла ваз кисмәне.

Рухи ныҡлыҡ, тогролоҡҡа, мөхәббәткә инанганлыҡ — Кәүсәриә шигриәтенең төп ҡанундары.

# САТҠЫЛАР



60 тин.

Кәүсәриә Шафиҡова
Фәүзиә Юлдашбаева
Мөхәммәт Закиров
Дилә Булгакова
Альберт Ҡотоев

# САТҠЫЛАР

БЫЛ ЙЫРЫМ
ҺИНЕҢ ХАҠТА

ҺАҠМАР
МУЙЫЛЫНЫҢ
КҮҘЕ ҠАРА

ҠАЙЫН ЯҠТЫҺЫ

МӘҢГЕЛЕК УТ

ҠОЯШ
КҮТӘРЕЛГӘНДӘ